Мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

# *Беренсе  кескәйҙәр төркөмөндә бәйләнешле телмәр үҫтереү формалары*



*Тәрбиәселәр:*

*Йыһангирова Гөлнара Марат ҡыҙы*

# Беренсе кескәйҙәр төркөмөндә бәйләнешле телмәр үҫтереү формалары

Баланың бәйләнешле, эҙмә-эҙлекле, грамматик һәм фонетик яҡтан




дөрөҫ итеп үҙ фекерен әйтә белеүе, уратып алған донъя тураһында төрлө ваҡиғалар һөйләй алыуы уның тормошонда мөһим роль уйнай. Шуға күрә, һәр дәрестә бәйләнешле телмәр үҫтереү маҡсатында, балалар менән фонемалар өҫтөндәге эште, һүҙ байлығын үҫтереүҙе, телмәрҙең грамматик яҡтан дөрөҫ төҙөлөшөн үҙләштереү эштәрен комплекслы рәүештә башҡарыу һәм был бурыстарҙы бер-береһе менән бәйле, даими рәүештә алып барыуҙы күҙ уңында тоторға кәрәк.

Беренсе кескәйҙәр төркөмөндә телмәрҙең бөтөн яҡтан үҙ-ара бәйләнеше (өндәр мәҙәниәте тәрбиәләү, телмәрҙең грамматик төҙөлөшө, һүҙлек эше) бәйләнешле телмәр үҫтереүҙең төп маҡсаты һәм сараһы булып тора.




Был төркөмдә уҡыған әҙәби әҫәрҙе һөйләп биреү, һүрәт буйынса һәм уйынсыҡтар тураһында һөйләү дәрестәрендә

бәйләнешле телмәр үҫтереү үткәрелһә лә, ләкин һөйләргә өйрәтеү иң мөһим булып тора. Балаларға ябай һәм ҡатмарлыраҡ һорауҙарға яуап биреүҙе һәм



педагогтың һөйләүен аңлай белеүҙе камиллаштырыу өсөн дәрестәрҙә һөйләргә өйрәтеү дауам ителә. Баланың фекерләүенең һәм һөйләүенең активлығында педагогтың һорауҙары алдынғы алым булып ҡала. Балалар предметтарҙы ҡарағанда, күренештәрҙе күҙәткәндә айырым хәрәкәттәрҙе дөрөҫ атайҙар, ләкин уларҙың үҙ –ара бәйләнешен һәм эҙмә-эҙлелеген билдәләй алмайҙар, йәғни дөйөм күҙ алдына килтерергә ҡыйынһыналар. Предметты һәм уның билдәләрен атай белеүе уйындарҙа үҫтерелә. Мәҫәлән: “Был ниндәй йәшелсә?”, “Кемдә нимә?” һ. б. Балалар яҡшы таныш уйынсыҡтарҙы ҡарағанда, уларҙың үҙенсәлеген, сифатын, хәрәкәтен, тәғәйенләнешен белдергән һорауҙарға яуап бирәләр һәм һөҙөмтәлә уйынсыҡ тураһында бәләкәй генә хикәйә төҙөйҙәр.




Предметтарҙы, күренештәрҙе тасуирлағанда һәм экиәттәр һөйләгәндә яңы төхнология - мнемоюл тәкдим ителә (ул шартлы тамғалар менән билдәләнгән схема), был баланың бәйләнешле телмәре менән бер рәттән хәтерен, фекерләүен, иғтибарын үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Айырым образдар балаларҙың иҫендә тиҙерәк ҡалһын өсөн ошо йәштәге балаларға был схема төҫлө итеп бирелә. Мнемоюлдағы шартлы тамғаларҙы ҡулланып, предметты йәки күренеште тасуирлап бәләкәй хикәйә төҙөйҙәр. Бының өсөн педагог иң



беренсе балаларҙы схемалағы шартлы тамғалар менән таныштыра һәм һөйләп күрһәтә. Мәҫәлән: “Был күлдәк. Күлдәк ҡыҙыл. Күлдәктең итәге (еңе) бар. Мин күлдәгемде яратам.”

Өсөнсө йәштәге балаларға китаптан уҡырға түгел, ә ике - өс тапҡыр ҡабатлап һөйләү отошло. Балаларҙың иғтибарын йәлеп итер өсөн педагог экиәтте һөйләгән ваҡытта экиәт геройҙарына оҡшатып хәрәкәттәр эшләргә тәкдим итә. Бының өсөн педагог төрлө күргәҙмә материалдар (өҫтәл театры геройҙары, фланелеграфҡа ҡуйылған һүрәттәр), уйынсыҡтар ҡуллана.



Телмәрҙе байытыу маҡсатында текстан алынған ҡыҙыҡлыраҡ өҙөктәрҙе ҡабатлайҙар.

Шулай уҡ, балаларҙан экиәттең йөкмәткеһендә ҡатмарлы булмаған тикшереүҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. Мәҫәлән: педагог фланелеграфта шалҡанды бабай,

әбей, ҡыҙ, айыу, бесәй һәм терпе нисек тартҡандарын күрһәтә, ә балалар бында нимә яңылыш икәнен күреп, айыу менән терпене эт менән сысҡанға алмаштыралар, тәртибе буйынса ҡуялар.

Балалар һүрәттәр ҡарағанда, уйынсыҡтар менән уйнаған ваҡытта әкиәт геройҙарына тап килгән айырым һүҙҙәрҙе, фразаларҙы ҡабатлайҙар, иҫкә төшөрәләр. бәләкәй генә әкиәттәр аша диалогик телмәр формаһын үҙләштерә башлайҙар.

Балалар менән эмоциялы бәйләнешкә ингәндә  һамаҡтар, йырҙар, сәңгелдәк йырҙары ҡулланыу шулай уҡ бәйләнешле  телмәр үҫешенә ыңғай йоғонто яһай.

